**Балаҡатай районы Урғалы мәктәбенең**

**9 класс  уҡыусыһы Юлмухаметова Аделинаның эссеһы**

Ниндәй генә һуғыш булмаһын, ул кешеләргә ҡайғы, хәсрәт, үлем килтерә. Һуғыш осорҙарында башҡорт халҡы кеүек ҡаһарманлыҡ күрһәткән батырҙар юҡтыр. Ҡаһарманлыҡ ул –патриотлыҡ. Патриотизм – ул үҙ тыуған илеңде һөйөү, яратыу. Патриот булған кеше генә тыуған иле менән ғорурлана, сикһеҙ ярата. Был тойғо кешеләрҙә меңәр йылдар үтһә лә һүнмәй, ә көндән-көн нығына бара. Бөгөнгө көндә патриот булыуҙы бәләкәйҙән тәрбиәләргә кәрәк. Шул саҡта ғына партиот булып үҫеүселәр һаны артасаҡ.

Я.Хамматовтың “Төняҡ амурҙары” романынан өҙөгөнән миҫалды ҡарайым. Тормош ни тиклем ауыр булһа ла, һуғышта ҡатнашыусыларға ярҙам ҡулын һуҙырға әҙер булған үҙ милләтебеҙ һуғышҡа әҙер икәнлеге ап-асыҡ күренә.Ҡаһымдың уйлауынса, нисек кенә ауыр булмаһын, уңышлы башҡараласағына ышана. Халыҡ, байҙар һәм батшалар тарафынан кәмһетелеүҙәренә ҡарамаҫтан , Рәсәй именлегенә барлыҡ көстәрен һаласаҡ. Ҡаһым түрә, Емельян Пугачев, Салауат Юлаев -барыһы ла патриоттар. Уларҙың уй-тойғоларын хуплай һәм уларға Ҡаһым теләктәш. Ҡаһым түрә, ошондай кешеләр араһында йәшәүе, аралашыуы, дуҫлашыуына бик шат.

Икенсе миҫалды мин бөгөнгө көн ваҡиғалары менән бәйләһем килә. Рәсәй менән Украина араһындағы сыуалыш бөгөнгө көндә һуғышҡа әйләнде. Беҙҙең милләттәштәребеҙ, ата-бабаларҙан ҡалған патриотлыҡ тойғоһон һаҡлап, ир-егеттәр “Шайморатов” полкына үҙ теләктәрен белдереп Украинаға киттеләр. Шулай уҡ полктар һаны артып тора, әле Салауат Юлаев полкыла ойоштоtarget ролдо. Бында ла үҙ теләктәре менән барыусылар һаны бихисап.

Әлбиттә,тыуған илгә, халҡыма булған ихтирам, үткәндәргә һәм бөгөнгөһөнә ғорурлыҡ тойғоһо көслө. Ошо тойғо мең быуаттар буйына һаҡланып, беҙҙең көнгә лә килеп еткән.
Мин өҙөктәге ҡуйылған проблема менән килешәм. Патриот дуҫтарың, таныштарың булһа, был тормошта йәшәүе еңелерәк булырына мин дә ышанам. Патриотлыҡ хисе генә булған барлыҡ ауырлыҡтарҙы еңеп сығасаҡ. Беҙҙең егеттәр еңеү менән әйләнеп ҡайтасаҡтарына өмөтләнәбеҙ.